Министерство образования и науки Республики Башкортостан
Отдел образования муниципального района Баймакский район
Республики Башкортостан

**Рассмотрено и принято**
на заседании ШМО учителей
социально-гуманитарного цикла
Руководитель
_________/Баймухаметова Г.Ю./
Протокол № 1
От «26»августа 2024 г.

**«Согласовано»**
Заместитель директора по УВР
_________/Янузакова Р.Р./
«30» августа 2024 г.

**«Утверждаю»**
Директор МОАУ ООШ № 5
_____________/Сирусин И.Н./
Приказ № 190
от «31» августа 2024 г.

# Рабочая программа
## по внеурочной деятельности
«Родной (башкирский) язык» для 9 класса

**Составитель: Юламанова Земфира Зекериевна,**
учитель родного языка и литературы
высшей квалификационной категории

**2024г.**

## Курсты үҙләштереү һөҙөмтәләре

Уҡыусыларҙың  башҡорт телендә грамоталы һөйләшә белеүе,  мәктәптең бөгөнгө тормошонда әүҙем һәм ижади ҡатнашыуы киләсәктә йәмғәтселек тормошонда әүҙем ҡатнашыусы шәхес сифаттарын үҙләштереүгә әҙер, башҡорт теленең сафлығын һәм таҙалығын тәьмин итә белеүсе, үҙҙәрен сәхнәлә иркен тота белгән һәм мәктәп сараларын саф башҡортса итеп алып бара белеүсе,  туған башҡорт теленә ҡарата һөйөү һәм ихтирам менән ҡарай, телмәр мәҙәнитенә эйә, һүҙлек запасын байытырға, грамоталы һөйләшеү серҙәренә төшөндөрөргә әҙер булған, бәйләнешле телмәр төҙөү оҫталыҡтарын ҡулланған һәм уны  формалаштырырға әҙер булған, үҙ аллы эшләү күнекмәләренә, фекерләү һәләттәренә эйә булған, дөйөм телмәр, тасуири телмәр мәҙәниәттәрен, ораторлыҡ һәләттәрен үҫтереү өҫтөндә туктауһыҙ эшләүсе, сәхнә мәҙәниәтенә өйрәнгән тәрбиәләнеүсе. Кластан тыш эшмәкәрлектең төп маҡсаттарының береһе булып, Рәсәй киңлегендә күп төрлө тел һәм мәҙәни берҙәмлектең нигеҙе милли үҙаң булыуы тураһында тәүге күҙаллауҙар формалаштырыу тора.

Программа нигеҙендә уҡыусының телмәр күнекмәләре, телмәр мәҙәниәте генә түгел, уның ижади фекерләү, аралашыу мәҙәниәте, сәхнә мәҙәниәте лә үҫешкән.  Уҡыусы туған телендә грамоталы һөйләү, тел нормаларын теүәл үтәү күнекмәләрен дә булдыра. Дәрестәрҙең уйын, ижади эштәр башҡарыу, телетапшырыу, диалог, тикшеренеү, комментарий биреү, интервью, репортаж  формаһында ойоштороу  уҡыусыларға стимул буласаҡ һәм уларҙа ижади фекерләүсе, баҙнатлы шәхес формалаштыра.

Дәрестән тыш эшмәкәрлектең маҡсаты – сифатлы белем алыу өсөн мөмкинлектәр тыуҙырыу. «Туған тел» программаһын үҙләштереү аша федераль дәүләт белем биреү стандарттарына тап килгән түбәндәге шәхси һөҙөмтәләр формалаша:

## Уҡыу курсын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре

**Шәхси сифаттарҙы үҫтереү.**

1. Үҙ аллы эш итеү, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарау.
2. Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу.
3. Мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына ҡарата  һаҡсыл булыу.
4. Тыуған ил, тыуған ер, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белеү, уларҙы һаҡлау, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын,  мәҙәниәтен, тарихын өйрәнеү, таратыу.
5. Ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булыу, файҙалы ял итеү.

6. Кеше менән аралашыу этикетын үҙләштереү.

7. Уҡыу процесында дистанцион эшмәкәрлекте ҡуллана белеү, парҙарҙа, төркөмдәрҙә килешеп эшләй белеү.

8. Һау-сәләмәт йәшәү рәүешен үҙләштереү.

9. Гражданлыҡ үҙаң һәм патриотизм тойғоһон формалаштырыу.

10. Рухи ҡиммәттәр, толерантлыҡ, үткәндәргә дөрөҫ баһа бирә белеү.

11. Тасуири телмәр һәм сәхнә мәҙәниәтенә, ораторлыҡ һәләттәренә эйә булыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре**

1. Уҡыу процесына яуаплы ҡарау, маҡсат ҡуйыу, эште планлаштыра белеү, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.

2. Теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт туплау, эҙләнеү эше алып барыу, уның буйынса презентация, видеояҙма, буклет, китапсыҡтар эшләй белеү.

3. Мәҙәни аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булыу, үҙфекерен яҡлағанда, уй-тойғоларын еткерә алырлыҡ аныҡ, эҙмә-эҙ бәйән итеү, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышыу, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белеү.

4. Билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштереү һәм телмәрҙә ҡуллана белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре.**

- телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең, башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел һәм халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
- гуманитар фәндәр системаһында телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;
- туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;
- тел ғилеменең төп аңлатмалары:лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле;функциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү.
- башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

- телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарында ярашлы ҡулланыу;
- һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен, һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ, төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;
- тел һүрәтләү саралары һәм уларҙы уҡыусы телмәрендә ҡулланыу;
- телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.
- башҡорт теленең һүҙлек составы менән танышыу; профессиональ һүҙҙәр һәм диалект һүҙҙәрҙе, иҫкергән һәм яңы һүҙҙәрҙе таныу, уларҙы текстан таба белеү.
- фразеологизмдарҙың мәғәнәләрен аңлау, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡуллана белеү.
- исемдәрҙе һан, килеш, зат менән үҙгәртеү; яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлау.
- сифат, сифат дәрәжәләре, уларҙың яһалышын өйрәнеү, төп һәм шартлы сифаттарҙың яһалыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү.
- һандар һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү; һандар менән мәҡәл һәм әйтемдәрҙе белеү, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.
- һлмаш һәм алмаш төркөмсәләре яһалышын өйрәнеү; алмаштың тел ғилемендәге ролен аңлау.
- ҡылым, ҡылым йүнәлештәре һәм күләмдәре яһалышын, уларҙың үҙенсәлектәрен өйрәнеү.
- рәүеш һәм уның төркөмсәләрен өйрәнеү; рәүеш һәм сифаттың оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын күрһәтә белеү.
- ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен айыра белеү; теркәүестәр, бәйләүес, киҫәксә, мөнәсәбәт һүҙҙәр, ымлыҡ, оҡшатыу һүҙҙәре тураһында төшөнсә биреү, уларҙы һөйләм контексында таный белеү.

**Дәрестән тыш эшмәкәрлек курсының йөкмәткеһе**

**Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле.** Тел тураһында дөйөм төшөнсә. Тел – үҫә барыусы ижтимағи күренеш. Башҡорт теле башҡа ҡәрҙәш телдәр араһында.

**Башҡорт теленең диалекттары.** Әҙәби тел һәм диалект. Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. Ике теллелек.

**Башҡорт теленең стилдәре.** Функциональ стилдәр. Уларҙың төп үҙенсәлектәре. Йәнле һөйләү стиле. Матур әҙәбиәт стиле. Фәнни стиль публицистик стиль Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле. Хаттар стиле.

**Һүрәтләү саралары.** Эпитет. Сағыштырыу. Метафора. Синонимдар.

**5-9 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.** Фонетика. Орфоэпия. Орфография. Һүҙьяһалыш. Лексика. Башҡорт теленең һүҙлектәре.

Ҡушымта

**Уҡыу-укытыу – методик һәм мәғлүмәти-ресурс тәьмин итеү**

**Уҡыу-укытыу-методик әҙәбиәт:**

1. Псәнчин В. Ш., Пәянчин Ю. В., Игликова А.И., Утәбаева Ф.Ю. «Башкорт теле» 9 класс. Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (дәреслек) (яңыртылған баҫма) – Өфө: Китап, 2016. – 238 б.

**Уҡыу-укытыу ҡулланмалары:**

2. Илмөхәмәтов Ә.Ғ. Хәҙерге заман дәрестәрен проектлау. – Өфө:БР МҮИ, 2015. – 54 б.

3. Сафина Л. Х, Латыпова Р. М., Санъяров Ф. Б.Башҡорт теле. Яңы ҡараш. – Өфө: Мир печати, 2021. – 94 б.

**Һүҙлектәр:**

4. Аҙнағолов Р. Ғ.Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1998. – 368 б.

5. Әхтәмов М. Х. Грамматик һүҙлек. – Өфө: Китап, 2007. −176 б.

6. Әхтәмов М. Х. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2008. – 776 б.

7. Урағсин З. Ғ. Русса – башҡортса һүҙлек. –Өфө: Китап, 2007. – 278 б.

8. Ураҡсин З. Ғ.Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2008. –163 б.

9. Ураҡсин З. Ғ. Башҡорт теленең фразеологизмдар һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1996. – 163 б.

**Методик кәңәштәр:**

10. Аҙнағолов Р. Ғ. Башҡорт телен укытыу методикаһы. Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5–9 кластары өсөн. – Өфө: Китап, 1996. – 320 б.